Башҡортостан Республикаһы Стәрлетамаҡ ҡалаһы ҡала округы
"Айырым фәндәре тәрәнәйтеп уҡытылған 12-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе"
муниципаль автономиялы дөйөм белем биреү учреждениеһы



# Эссе
# "Мин - уҡытыусы"

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
## Рим Муллағәли улы Ғәббәсов

Уҡытыусы… Балаларға белем биреүсе, яҡтылыҡҡа, киләсәккә әйҙәүсе, йәш быуынға әҙәп-әхлаҡ ҡанундарын өйрәтеүсе, киләсәктең тотҡаһы булырҙай шәхес тәрбиәләүсе…. Ябай тел менән әйткәндә, уҡытыусы – ул кешелек донъяһы туплаған тәжрибәне киләһе быуынға тапшырыусы кеше.

Мин дә ошо изге юлдан атлаусылар рәтендәмен. 20 йыл илһамланып, китап-дәфтәрҙәремде ҡосаҡлап, һәр иртә мәктәп юлынан ҡыуана-ҡыуана атлайым… Тирә-яғымда шау-гөр килгән уҡыусылар, балаларын ҙур өмөтттәр менән оҙатыусы ата-әсәләр, ихтирамлы ла, талапсан да коллегалар, мәктәп етәкселеге, ҡала мәғариф бүлеге, гәзит-журнал редакциялары, урта һәм юғары уҡыу йорттары, йәмәғәт ойошмалары, милли-мәҙәни усаҡтар, спорт комплекстары һәм башҡалар, һәм башҡалар…

Бар ерҙә лә өлгө булырға тейешмен… Минең атлап барышым, тышҡы ҡиәфәтем, кешеләр менән аралашыуым, үҙемә, ғаиләмә, эшемә, донъяға ҡарашым – барыһының да күҙ алдында… Мин белем биреүсе генә түгел, мин тәрбиәсе лә… Күп осраҡта балалар уҡытыусыһынан өлгө алалар, уның ҡыланышын, һүҙҙәрен ҡабатлайҙар, уҡытыусы фекерен ҡабатлап, хатта ата-әсәһе менән бәхәскә лә керәләр. Замана балаларының заманса фекерҙәрен дөрөҫ юҫыҡҡа бороу өсөн миңә лә үҙемде камиллаштырыу өҫтөндә даими эшләргә кәрәк икәнлеген тоям. Уҡыусыларҙың белемгә ынтылышын көсәйтеү өсөн заманса технологиялар, заманса алымдар ҡулланыу, Интернет селтәренең байлыҡтарын тотоноу, электрон уҡыу әсбаптарын асыу, электрон уҡыу системаһын үҙләштереү өлкәһендә лә башҡараһы эштәрем байтаҡ…

Мәктәптә мин башҡорт теле кабинетын асып инәм. Эйе, мин башҡорт теле уҡытыусыһы… Ябай ғына яңғыраған был исем, башҡа уҡытыусыларҙан айырмалы рәүештә, миңә айырым яуаплылыҡ өҫтәй кеүек. Быуаттар төпкөлөнән ишетелгән Ер-әсә ауазын сабый күңеленә һеңдереүсе, «Илем, ерем» тип яу сапҡан ата-бабалар аманатын, ил инәләренең бөртөкләп йыйған күңел йәүһәрҙәрен киләсәк быуынға еткереүсе, Тыуған иленә, тыуған еренә, туған теленә битараф булмаған шәхес тәрбиәләүгә ынтылыусы тип күҙаллайым мин бөгөнгө башҡорт теле уҡытыусыһын. Мин дә уҡыусыларымда халҡымдың шишмәләй саф та, таңғы елдәй наҙлы ла, Ағиҙелдәй тәрән дә, Урал тауылай бейек тә, ҡурай моңолай хисле лә булған башҡорт телендә һөйләшергә өйрәнеү теләген бойомға ашырам. Телем аша Башҡортостандың сал тарихы, мәшһүр сәнғәте, ҡабатланмаҫ тәбиғәте, киң күңелле халҡымдың бай ижады менән таныштырыу - уҡытыу эшмәкәрлегемдең бер маҡсаты

булһа, матур һәм ирекле Ватаным менән ғорурланыу тойғоһо, уға ҡарата һөйөү тәрбиәләү - икенсе маҡсатым булып тора. Телебеҙҙе, бөтә ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе һаҡлап ҡалыу һәм байытыу, киләсәккә белемле, тәүфиҡлы, сәләмәт балалар тәрбиәләү – төп бурысым, башҡорт теленең байлығын, матурлығын күрһәтеү, телгә ҡыҙыҡһыныу уятыу, уны өйрәнеүгә теләк тыуҙырыу – төп эштәремдең береһе.

Бөгөнгө уҡытыусы эшмәкәрлегенән киләсәк быуындың рухи үҫеше, белеме, донъяға ҡарашы, әхлаҡи сифаттары кимәле һынлана. Ә тыуған ергә һөйөү тәрбиәләү, туған телде өйрәнеү, халыҡ йолаларын һаҡлау һәм тергеҙеү бурыстары мәктәптә тик башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә генә атҡарыла. Әлбиттә, беҙ яңғыҙ түгел. Арҙаҡлы ғалим-ғалимәләребеҙ, битараф булмаған дәүләт эшмәкәрҙәребеҙ, яҙыусы-шағирҙарыбыҙ, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре, Башҡорт ҡоролтайы, «Ағинәйҙәр» клубы, йәштәр берләшмәһе, киң мәғлүмәт саралары менән берлектә дәррәү эшләһәк, юлыбыҙ уң булыр тип уйлайым. «Берҙәмлектә көс» тип юҡҡа әйтмәгәндәр бит ата-бабаларыбыҙ, бергә булһаҡ, берҙәм булһаҡ, илебеҙ ҙә, телебеҙ ҙә йәшәр тип инанам…

Ошондай яҡты уйҙар менән башҡуллай эшкә сумам… Тәрбиә һәм уҡытыу эшенә бөтә йөрәгең менән, күңел һалып тотонорға кәрәк. Һөнәреңде яратып башҡарғанда ғына балалар менән ныҡлы бәйләнеш төҙөй алаһың, уларҙы фән тауының юғары үрҙәренә әйҙәй алаһың. Уҡытыу-тәрбиә барышында күҙәтеүсәнлек, иғтибарҙы тигеҙ бүлә белеү, бер баланы ла иғтибарҙан ситтә ҡалдырмау бик мөһим, сөнки бер класта төрлө ата балаһы йыйылған, һәр береһе һинән айырым иғтибар талап итә. Хәҙерге заман балалары уҡытыусынан тотанаҡлыҡ, сыҙамлыҡ, эҙмә-эҙлелек, ныҡышмалыҡ, үҙ-үҙеңде тота белеүҙе талап итә - быны ла күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай. Ә башҡорт теле уҡытыусыһы телмәре тасуирилығы, хислелеге менән башҡа уҡытыусыларҙан айырылып торорға тейеш, сөнки тыуған ерҙең гүзәллеген, тыуған телдең нәфислеген башҡаса күрһәтеү мөмкин түгел.

Тәжрибәле уҡытыусы булараҡ, миңә юғары кластарҙы ышанып тапшыралар. Бар һәләтемде, ҡомарымды ҡушып әҙерләнәм дәрестәргә, сөнки 9-11 класс уҡыусылары менән дәрес-әңгәмә, дәрес-фәлсәфә, дәрес-уйланыуҙар үткәреү ныҡлы әҙерлек талап итә. Тормош юлындағы тәүге һынауға әҙерләнеүсе, ниндәй һөнәр һайларға, ниндәй уҡыу йортона уҡырға инергә тип уйланыусы, Берҙәм дәүләт имтиханынан бер аҙ ҡурҡып та ултырыусы өлкән класс уҡыусыларының кәңәшсеһе, ярҙамсыһы, ҡайһы саҡта серҙәше лә булып баҫам алдарына. Балалар менән аралашыуҙан кинәнес табам, илһам алам, улар күтәргән проблемаларға балалар күҙлегенән ҡарап, дөрөҫ

йүнәлеш һайларға өйрәтәм. Тик һуңғы ваҡытта сығарылыш уҡыусыларының күбеһенең Башҡортостандан ситкә уҡырға китергә ынтылыуҙары күҙелдә ҡыра. Ҡайһыһынан һорама, «Мәскәү, Питер» тиҙәр, хатта Ырымбур, Ҡазанды өҫтөн ҡуялар, ата-әсәләре лә «Үҙебеҙ уҡый алманыҡ, китһен, уҡыһын» тиҙәр … Ысынлап та, бөтә яҡшы уҡыған уҡыусыларыбыҙ ситкә китеп бөтһә, уҡып, һөнәр алғас, Башҡортостанға ҡайтырҙармы? Ил, ер, тел киләсәге кемдәр ҡулына ҡалыр? Шуның өсөн дә быңдай балалар менән, уларҙың ата-әсәһе менән аңлатыу эштәрен ентекле алып барырға кәрәктер тип уйлайым. Һуңғы йылдарҙа сығарылыш уҡыусыларының 61 проценты уҡырға тип Башҡортостандан ситкә китә һәм, сит ҡалала уҡыу ҡиммәткә төшкәнлектән, студент йылдарынан уҡ кафе-рестарандарҙа официант, магазиндарҙа һатыусы, маршрут автобустарҙа йөрөтөүсе, йөк бушатыусы, төҙөлөштә кирбес-бутама ташыусы булып эшкә башлайҙар. Ҡайһыһы уҡып бөтә алмай ташлап ҡуя, ҡайһыһы уҡып бөтһә лә үҙ профессияһы буйынса эшкә урынлаша алмай, һаман да шул эшҡыуарҙарҙың табанын һеперә, ҡайһылары Башҡортостандың юғары уҡыу йорттарына күсереүҙе һорап, ғаризалар яҙа. Башҡорт дәүләт педагогия университеты ректоры Рәил Мирвәли улы Әсәҙуллин әйтеүенсә, быңдай ғаризаларҙың һаны быйылғы йылда 200-ҙән ашҡан. Милләтебеҙҙең аҡыллы балалары үҙ еренән, үҙ ярҙарынан айырылып, сит ергә, сит ярға берегә алмай, аяуһыҙ заман тулҡындарында бәрелеп-ҡаҡлығып, юғалып ҡалмаһын өсөн, ә уҡып, кеше булғандары, тыуған еребеҙ, тыуған телебеҙ мәнфәғәтенә эшләһен өсөн бөгөнгө башҡорт теле уҡытыусыһының тауышы көслө яңғырарға, тыуған илебеҙҙең, һөйөклө Башҡортостаныбыҙҙың лайыҡлы патриоттарын тәрбиәләүҙә тос өлөш индерергә тейеш тип иҫәпләйем.

Ошо бурыстар менән уҡытыусылар һуҡмағынан атлауымды дауам итәм… Уҡытыусы һөнәрен һайлағанға үкенмәйем, минең өсөн “Кем булырға?” тигән һорау бөтөнләй булманы. Уҡытыусы булыу – минең бала саҡ хыялым, был минең булмышым, көнкүрешем, тормош юлым…

*“Уҡытыусымын!*
*Һөйөнөп эшкә барам,*
*Байрам кеүек миңә һәр көнөм.*
*Балалар һәм мәктәп – бар байлығым,*
*Үҙем тапкан бәхет бөртөгөм”.*